**БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ**
**ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОНЫ**
**ҮҘӘКЛӘШТЕРЕЛГӘН КИТАПХАНАЛАР СИСТЕМАҺЫ**
**МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**ҮҘӘК РАЙОН КИТАПХАНАҺЫ**
**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ БҮЛЕГЕ**

# «Ғаиләм – көс туплаусы нур-йомғаҡ»
# бөтә Рәсәй айыҡлыҡ көнөнә арналған түңәрәк өҫтәл


**Сценарий авторҙары:**
*Рәмилә Файзуллина,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге мөдире,*
*Лира Такалова,*
*башҡорт әҙәбиәте һәм*
*тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге китапханасыһы*


**Аҡъяр- 2022 й.**

**Маҡсат:** айыҡ, сәләмәт йәшәү рәүешен пропогандалау, һаулыҡты һаҡларға, унын ҡәҙерен белергә өйрәтеү, спортҡа ыңғай ҡараш тәрбиәләү, әҙәп-әхләҡ сифаттарын үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** «Һаулыҡ – ҙур байлыҡ» исемле китап күргәҙмәһе, телевизор, слайд-презентация, видеоматериалдар, сәләмәтлек, ғаилә тураһында яҙылған мәҡәлдәр карточкалары, буклеттар.

**1 алып барыусы:** Һаумыһығыҙ хөрмәтле уҡыусылар, уҡытыусылар, саҡырылған ҡунаҡтар! Һеҙҙе бөтә Рәсәй айыҡлыҡ көнөнә арналған «Ғаиләм – көс туплаусы нур-йомғаҡ» тип аталған түңәрәк өҫтәлдә күреүебеҙгә шатбыҙ. Килгән ҡунаҡтарыбыҙ менән таныштырып үтәйек: Аҡъяр «Жәмиғ» мәсетенең имамы Муса хәҙрәт, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, мәғариф хеҙмәте ветераны, «Ағинәйҙәр» ҡоро етәксеһе Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы Бохарбаева, 2-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбенең фельдшеры Лилиә Рәшит ҡыҙы Ситчанова, әүҙем сәләмәт тормош алып барыусы Мәрйәм Ниғмәт ҡыҙы Хәйҙәрова, өлгөлө атай, ғаилә башлығы Рәфил Урал улы Бикбов, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән социаль приюты тәрбиәсеһе Миңзәлә Ғәҙелша ҡыҙы Ғаббасова.

**2 алып барыусы:** Хәйерле көн, хөрмәтле дуҫтар!

Ғаиләм – ҡәлғәм, тиҙәр, халыҡта. Ғаиләле кеше үҙен ышаныслы тота, бала ла тулы ғаиләлә, ата-әсәһе янында бәхетле үҫә. Ғаилә усағын һүндермәй, йортҡа ҡот өҫтәп йәшәү – һәр кемдең изге бурысы. Атай-әсәнең тормошо — бала өсөн көҙгө. Сабыйҙарыңды киләсәктә ниндәй итеп күргең килһә, башта үҙеңә лә шундай булырға кәрәк. Балалар ата-әсәһенең ҡарашын, фекерләүен һәм рухи ҡиммәттәрен үҙләштерә, бөтә аҙымын ҡабатлай. Балаға ата-әсәнең төп бүләге – өлгөлө холоҡ.

**1 алып барыусы:** Нимә ул алкоголь? Ул нимәне аңлата? Ҡайҙан килеп сыҡҡан? тарихҡа күҙ һалып үтәйек. Борон ғилемлеге менән шөһрәт ҡаҙанған бер ғәрәп алхимигы ғәжәп бер эсемлек уйлап тапҡан. Был эсемлек уға оҡшап ҡалған, сөнки тәне яҙылғандай булып, кәйефе күтәрелгән, йыр-бейеүгә әүәҫлеге артҡан. Халыҡ күңеленә хуш килгән был эсемлеккә «Ғәжәп бер эсемлек», йәки «Әл - ҡәһел» тигән исем биргән. Халыҡ алхимикты маҡтай – маҡтай эскегә бирелгән. Күп тә үтмәй, уның һөҙөмтәһе булып, донъяуи эштәр артта ҡалған: баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә әйләнгән, оҫтаханалар эштән туҡтаған, баҙарҙар һүнгән… Эскегә бирелгән халыҡта әҙәп тә юғала: ыҙғыш-талаш, енәйәт, үлтереш күбәйә, ялҡаулыҡ, урлашыу, оятһыҙлыҡ, әҙәп-әхләк тигән төшөнсәләр юғала. Яңыраҡ ҡына алхимикка рәхмәт яуҙырған халыҡ хәҙер инде уға ҡәһәр яуҙырған. Ул хәсрәткә бирелеп, аҡылынан яҙған. Ғәрәп илендә уйлап табылған «Әл - ҡәһел» беҙҙең илдәргә лә тарала. Ул көнбайыш Европаға «Алькагель», ә урыҫтарға «Алкоголь» булып килә. Ислам дине ҡанундары буйынса ла хәмер ҡулланыу ҡәтғи тыйыла һәм иң оло гонаһтарҙың береһе тип иҫәпләнә.

***Һүҙ Акъяр «Жәмиғ» мәсетенең имамы Муса хәҙрәткә бирелә.***

***Рәхим итегеҙ.***

**2 алып барыусы:** Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев хәмерҙе «Гонаһтарҙың атаһы», тип билдәләй. Ә күренекле әҙип Фәнил Әсәнов был турала әсенеп, бына ниндәй һүҙҙәр бәйән иткән: «Тормоштағы бөтә кәмселектәр, бөтә насарлыҡтар – араҡы бәләһе. Ошо шайтан кешеләрҙең эсенә инеп оялай ҙа уларҙы көнө-төнө яңылыш юлға этәреп тик тора».

«Хәрәкәттә - бәрәкәт» тип халҡыбыҙ юҡҡа әйтмәгән, әүҙем сәләмәт тормош юлы алып барыу, тырыш булыу өсөн үҙеңдә ниндәй сифаттар тәрбиәләргә кәрәк?

***Һүҙ Мәрйәм Ниғмәт ҡыҙына Хәйҙәроваға бирелә. Рәхим итегеҙ.***

**1 алып барыусы:** Ғаилә – йәмғиәттең бер өлөшө. Татыу, берҙәм, яҡшы ғаиләләр күп булған һайын, йәмғиәт тә ныҡлы нигеҙле була. Сөнки донъялағы бар гүзәллек ғаиләнән башлана, изгелек, яуаплылыҡ орлоҡтары ла ғаиләлә сәселә. Ә инде ғаиләгә хәмерҙең килеп инеүе, үҙ ихтиярың менән бәхетеңде быуып, яҡындарыңдың тормошон ҡара ҡайғыға батырып эскелек менән мауығыу оло фажиғә. Бик күптәрҙең башына еткән дә, сиргә һабыштырған да, яҙмыштарҙы харап иткән дә ул – хәмер. «Эскелек һаҙлығына батҡан, юлдан яҙған ғаиләләргә нисек ярҙам итергә?»

***Һүҙ Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы,***
***мәғариф хеҙмәте ветераны, «Ағинәйҙәр» ҡоро етәксеһе***
***Менәүәрә Исхаҡ ҡыҙы Бохарбаеваға бирелә.***
***Интернет селтәренән алынған видеояҙма: «Үҙеңде һаҡла».***

**2 алып барыусы:** Халҡыбыҙ борон-борондан ғаилә ҡороп, балалар үҫтереүҙе йәшәйештең төп маҡсаты тип ҡараған. «Ил» һәм «ғаилә» төшөнсәләре бер-береһенән айырылғыһыҙ икәне халыҡтың ауыҙ-тел ижадында ла асыҡ күренә. Батыр егеттәр үҫтереү, инсафлы ҡыҙҙар тәрбиәләү, йәштәрҙе башлы-күҙле итеү, мөхәббәт темаһы күп кенә әкиәт, ҡобайыр, легенда, йырҙарҙа сағылыш тапҡан. Донъя классикаһына ингән «Йософ һәм Зөләйха» «Ләйлә һәм Мәжнүн», «Таһир менән Зөһрә», «Ҡуҙыйкүпәс менән Маянһылыу» мөхәббәт тарихтары киң билдәле. Мәңгелек мөхәббәт бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр, сөнки ғаилә нигеҙендә һөйөү ята. Йәмғиәтебеҙҙә ныҡлы ғаиләләр күберәк булһа, илебеҙҙең киләсәге өмөтлө тигән һүҙ. «Атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән», ти халыҡ мәҡәле. Балалар насар ғәҙәттәргә ылыҡмаһын өсөн иң беренсе ата-әсәй үрнәк булып торорға тейеш.

***Һүҙ өлгөлө атай, ғаилә башлығы***
***Рәфил Урал улы Бикбовҡа бирелә. Рәхим итегеҙ.***

**1 алып барыусы:** Илебеҙҙе туҙан кеүек ҡаплап алған алама ғәҙәт – эскелектең һаулыҡ өсөн зыяны ифрат ҙур. Бигерәк тә яңы ғына формалашҡан үҫмерҙәр организмына кире йоғонто яһай. Алкоголь менән артыҡ мауығыу арҡаһында барлыҡҡа килгән һәм көсәйгән хроник сирҙәр хаҡында әйтеп тораһы ла түгел, эскән ата-әсәнән тыуған ауырыу балалар – үҙе бер оло тема.

***Һүҙ 2-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбенең фельдшеры***

***Лилиә Рәшит ҡыҙы Ситчанова бирелә. Рәхим итегеҙ.***

***Интернет селтәренән алынған видеояҙма:***

***«Алкоголдең бала үҫешенә тәҫьире».***

**2 алып барыусы:** Донъялағы барлыҡ бәлә-ҡазалар фәҡәт ошо «араҡы» тигән шыйыҡлыҡты эсеү арҡаһында эшләнә. Үлемесле авариялар, эскән килеш кешенән үс алыуҙар, кеше үлтереүҙәр, эскән килеш өйөнөң эсендә янып үлеүҙәр, урлашыуҙар фәҡәт ошо «Араҡы» тигән шыйыҡлыҡты ҡулланып башҡарыла. Хәмерҙең әхлаҡи зыяны ла бихисап: уның арҡаһында күпме ғаиләләр тарҡала, ата-әсәһеҙ тәрбиәләнгән балалар һаны ишәйә, йәмғиәттә әҙәп, кешелеклелек, әхлаҡ кеүек рухи ҡиммәттәр юҡҡа сыға бара.

Һуңғы осорҙа илебеҙҙә һәр өсөнсө ғаиләнең тәүге өс йылда уҡ тарҡалыуы, ата-әсәле булып та, улар наҙын күрмәйенсә, балалар йортонда тәрбиәләнеүе йөрәктәрҙе әрнетә. Ни өсөн балалар йорто барлыҡҡа килә? Ни өсөн сабыйҙар дәүләт ҡарамағына эләгә?

***Һүҙ балалар һәм үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән социаль приюты***

***тәрбиәсеһе Миңзәлә Ғәҙелша ҡыҙына бирелә. Рәхим итегеҙ.***

**1 алып барыусы:** Шуныһы ҡыуаныслы, һуңғы йылдарҙа илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә эскелеккә, тәмәке тартыуға ҡаршы ныҡлы көрәш башланды: Республикабыҙҙа «Айыҡ ауыл» бәйгеһе, «Айыҡ ҡатын» проекты әүҙем эшләй һәм ҡатнашырға теләүселәрҙең һаны йылдан-йыл арта бара. Халҡыбыҙҙың дин тәғлимәттәрен өйрәнеп, иман юлына баҫыуы ла ҡыуаныслы күренеш.

Һәр кем ғүмере өсөн үҙе яуаплы. Әммә шуны иҫтә тотайыҡ: Аллаһы Тәғәлә бер генә тапҡыр биргән ҡәҙерле ғүмерҙе һәр кеше сәләмәт, матур, бәрәкәтле, ҡотло тормошта лайыҡлы йәшәргә һәм эшләргә тейеш. Аҡыллы кеше яман ғәҙәттәргә бирешмәй!

**2 алып барыусы:** Хөрмәтле уҡыусылар һеҙҙең мәҡәлдәр яҙылған карточкалар бирелә, әммә улар буталған һеҙгә уларҙы дөрөҫ итеп төҙөп, уҡып ишеттерергә кәрәк.

1. Сәләмәт тәндә - таҙа аҡыл.
2. Байлыҡ — бер айлыҡ, һаулыҡ — ҙур байлыҡ.
3. Татыу ғаилә – ил күрке.
4. Әҙәпкә ғәҙәтләнһәң - әҙәм булырһың, яманға ғәҙәтләнһәң - әрәм булырһың.
5. Айыҡлыҡ – ҙурлыҡ, эскелек – хурлыҡ.
6. Араҡы яратҡан – аҡылын таратҡан.
7. Ояһында ни күрһә — осҡанында шул булыр.
8. Көслө кеше берҙе еңер, белемле кеше меңде еңер.
9. Ни сәсһәң – шуны урырһың, ни ҡылһаң – шуны күрерһең.
10. Яҡшынан ҡасма, яманға аяҡ баҫма.

**1 алып барыусы:** Үҙ һаулығын даими ҡайғырҡан, бөхтәлек яратҡан, спорт менә дуҫлашҡан, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләр бәхетле һәм оҙон ғүмер кисерәләр. Ошо хәҡиҡәтте төшөнөү һәм шуға ярашлы йәшәү – һәр кемдең изге бурысы.

***«Һаулыҡ – ҙур байлыҡ» китап күргәҙмәһенә байҡау яһау.***

***«Беҙ сәләмәт тормош яҡлы!» исемле буклеттар таратыу.***

**2 алып барыусы:** Сәләмәт тормош алып барыу ата-әсәйендең, туғандарыңдың яғымлы ҡарашын, хәстәрлеген тойоп йәшәү, кешеләргә ярҙам итеү, изгелек эшләү, тырышып уҡыу, илеңә, халҡыңа файҙа килтереү – бәхеткә илтеүсе ҡиммәттәр.

**1 алып барыусы:** «Араҡы ятраҡан - аҡылын тараҡан», ти халҡыбыҙ. Йолаларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙең береһе лә эскелек менән бәйле булмаған. Бәйгеләр, һабантуйҙар ваҡытында ла рухи яҡтан бай халҡыбыҙ хәмер эсмәгән. Ата-бабаларыбыҙ миҫалында, тәмәке тартыу, араҡы, һыра һәм башҡа спиртлы эсемлектәр эсеү кеүек насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ торһаҡ ине. Эскелек ҙур аҙымдар менән таралһа ла, бөгөн, ҡыуанысҡа күрә, йәштәр спорт менән шөғөлләнә, сәләмәт тормош алып бара, белем алырға ынтыла, иманға ҡайта. Хәмергә илтеүсе сәбәптәрҙән көслө булып, күберәк хәрәкәт итеп, яҡын кешеләребеҙ менән тормоштоң ҡыуаныстарын кисереп йәшәргә яҙһын.

**2 алып барыусы:** Тыныс, аяҙ күк йөҙө, ғаилә именлеге теләйбеҙ.
Киләһе осрашҡанға тиклем, һаубулығыҙ.